## Донъяла

**МОСОЛМАН ҒАЛИМДАРЫ ӨСӨН 40 ҠАТЛЫ ЙОРТ.** Мәскәүҙә “Радикализмға ҡаршы Ислам тәғлимәте” конференцияһында ҡатнашҡан мосолман ғалимдарының Халыҡ-ара берлеге (МҒХБ) вәкилдәре күптән түгел Латарҙа офис булдырырға ҡарар итте һәм бейек йорт һалырға тип, аҡса йыя башланы. Офисты файҙаланыуҙан алынған табыштың ҙур өлөшөн вакф тәшкил итәсәк. Вакф өсөн ерҙе Катар әмире Хамад бин Халифа ас-Сани биргән. Хәҙер МҒХБ 40 ҡатлы асман-йортто төҙөр өсөн хәйриә сараларын йәлеп итмәксе. МҒХБ вәкиле хәбәр итеүенсә, был проектҡа ярҙам итеүселәрҙең хеҙмәте “саҙаҡа-жәриә” (бөтмәй торған саҙаҡа) дәрәжәһенә эйә буласаҡ. “Мөслим йыйынтығындағы хәҙистә Мөхәммәд Рәсүл (с.ғ.с.) шулай тип әйткән: “Кеше үлгәндән һуң уның эштәре өҙөлә (яҡшылары ла, насарҙары ла), ләкин өсәүһе ҡала (үлгәндән һуң да сауап биреп торғандары): атаһы өсөн Аллаһҡа доға ҡылыусы иманлы улы (бала); мәрхүм ҡалдырған ғилемдәр (төрлө асыштар, китаптар һ.б.) һәм ул ҡалдырған саҙаҡа-жәриә, йәғни ул төҙөгән мәктәп йәки мәсет, - кешеләр былар менән файҙаланған саҡта изгелек ҡылыусы үҙе үлгәндән һуң сауап алып торасаҡ”.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ 1917 йылғы революцияға тиклем вакф Рәсәйҙә лә көслө булған, барлыҡ мәсет-мәҙрәсәләр, мәктәптәр уның иҫәбенә йәшәгән.

**ПАТРИАРХ МОСОЛМАНДАРҘЫ ҺӘМ ПРАВОСЛАВИЕ ДИНЕНДӘГЕЛӘРҘЕ ТУҒАНДАР, ТИП АТАНЫ.** Рус православие сиркәүе етәксеһе патриарх Кирилл Рәсәйҙең мосолмандарын һәм православие динен тотҡандарҙы туғандар, тип атаны. Илебеҙҙәге ике ҙур конфессияның яҡшы мөнәсәбәтен булдырыуҙа мосолмандарҙың Үҙәк диниә идаралығының хеҙмәтен ул тап шулай баһаланы. Ҡотҡарыусы Ғайса ҡорамында үткән осрашыуҙа шәйех Тәлғәт Тажетдинды сәләмләп, УРС етәксеһе: “Һеҙ үҙ илен ятраҡан, насрани туғандарына хөрмәт һәм һөйөү менән ҡараған йөҙләгән имандаштарығыҙҙы тәрбиәләнегеҙ. Православие һәм мосолмандарҙың изге мөнәсәбәте бөгөн күп осраҡта ошо кешелек нигеҙенә таяна. Беҙ шулай уҡ быны бик баһалайбыҙ”, тине.

Сиркәү башлығы Өфөләге Үҙәк диниә назаратының Рәсәйҙә һәм Советтар Союзында мосолмандар өммәтен һаҡлауҙағы тарихи ролен дә онотмаҫҡа саҡырҙы. “Беҙ быларҙың бөтәһен дә хәтерләйбеҙ һәм һеҙгә ихтирам менән ҡарайбыҙ”, тине Кирилл һәм мосолмандарға уңыштар, Ватанға фиҙакәрлектә Аллаһы Тәғәләнең ярҙамын теләне.

**РИЧАРД БЕЛЛ, ИНГЛИЗ ҒАЛИМЫ:**

Европа һаман аҫҡа табан тәгәрәй бара. Уның ялтырауыҡ, мөхтәсиб ҡыйығы аҫтында стрестар, аҡылдан яҙыуҙар, үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙар, йән ауырыуҙары, аҙғынлыҡ, наркотик һәм иҫерткес ҡулланыуҙар, талау, мәсхәрәләү, енси сирҙәрҙең самаһыҙ артыуы йәшеренгән. Ихлас һөйөү һәм кешеләрҙең бер-береһенә булған ихтирамы юҡҡа сыҡты. Барыһын да үлемдән ҡурҡыу хисе ялмап алған. Ғаилә бөтөнлөгө юҡҡа сыҡты, туғандар араһында бәйләнеш өҙөлгән: Дәүләт хакимдары бынан сығыу юлын таба алмай. Зыялы заттар әхлаҡһыҙлыҡ бушлығы эсендә көн итә. Европа өсөн тик бер генә юл ҡала. Берҙән-бер ҡотолоу юлы. Был Ислам. Бүтән юл юҡ.

## Ғилем һәм ғәмәл

# КҮҘҘЕ ХАРАМДАН ҺАҠЛАУ

*Динебеҙ, уға ярашлы әхлаҡ, әҙәп төшөнсәләре менән ҡыҙыҡһыныусылар арабыҙҙа арта бара. Тимәк һорауҙарға ваҡытында яуап биреү шулай уҡ изге эш. Был йәһәттән мосолман календарҙары, матбуғат баҫмаларындағы айырым рубрикалар, шулай уҡ телевидение һәм радиола тапшырыуҙар ихтыяжды ҡәнәғәтләндерергә тырыша. Ләкин дин - ул мәңгелек ғилем. Өйрәнгән һайын яңы һорауҙар ҡалҡып сығып ҡына тора. Йома намаҙҙарында хәҙрәттәрҙең вәғәздәре шулай уҡ олоһон да кеҫеһен дә үҙенә йәлеп итә. Махсус белемле дин әһелдәре менән аралашыу дөрөҫ йәшәү, хаҡ юлдан барыу өсөн ныҡ ярҙам итә. Хатта миҙгелдәр алмашыныуы ла әҙәм балаһының тәртибе, үҙ-үҙен тотошо тураһында уйланырға саҡыра. Көндәлек тормошта ғына ла мең төрлө һорауҙар тыуа. Быныһы ғаилә ағзалары, уларҙың бер-береһенә мөнәсәбәтенә нығыраҡ ҡағылалыр. Беҙ ошо ихтыяжды иҫәпкә алып, Ҡ.Рамазанов хәҙрәттең вәғәзен тәҡдим итмәксебеҙ.*



Иң оло бәхет килтерәсәк дөрөҫ һәм ғәҙел юлды - Ислам динен - беҙгә шәфәғәт иткән Аллаһы Тәғәләгә маҡтауҙарыбыҙ булһын! Беҙ дин зәғифләнгән осорҙа йәшәйбеҙ, кешеләр йөрәгендә тәҡүәлек (ҡурҡыу) кәмене, күптәрҙең күңеле был донъяның ялтырауыҡтары һәм байлыҡтарына ғына талпына. Был хәл ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың тәртибендә, тотошонда ла сағылмай ҡалмай. Күп һылыуҙарыбыҙ көндәр йылыныу менән сисенә, ярым-яланғасланa башлай. Шуға ла дин әһелдәре вәғәздәренә ғәүрәт урындарҙы ҡаплау, сит күҙҙәрҙән һаҡланыу кәрәклеге тураһында әйтергә мәжбүрҙәр. Беҙҙең заманда харамдан һаҡланыу күпкә ҡыйын. Был, әлбиттә, ауырлыҡҡа һылтанып, күҙгә ирек бирергә тейешбеҙ, тигәнде аңлатмай. Эйе, харамға күҙ атыуҙан тыйылыу еңел түгел, ләкин ауырлыҡҡа ярашлы, һәр кем ахирәттә сауабын да аласаҡ. Хәдистә әйтелә: “Киселгән ауырлыҡтарға ярашлы әжере биреләсәк”. Әйтәйек, әүәле кеше харамдан күҙен ун тапҡыр һаҡлаһа, ун тапҡыр әжер биреләсәк, бөгөн харамға йөҙ йәки мең тапҡыр ҡарамаған кеше шул тиклем үк әжерен дә аласаҡ. Беҙгә ҡарашты йәшерергә Ҡөрьән-Кәрим ҡуша (яҡынса мәғәнәһе): “Әйт (Эй, Мөхәммәд (с.ғ.с.)!) иман килтергән ирҙәргә, улар үҙҙәренең күҙҙәрен һәм оят ерҙәрен харамдан һаҡлаһындар. Был - улар өсөн таҙараҡ. Шул хаҡ, Аллаһы Тәғәлә уларҙың нимә эшләгәнен белә. Шулай уҡ иман килтергән ҡатындарға әйт, улар үҙҙәренең күҙҙәрен һәм оят ерҙәрен харамдан һаҡлаһындар”. (“Ән-Нур”, 30-31-се аяттар).

Табарани тапшырған хәҙистәрҙең береһендә шулай тиелә: “Өс төр күҙ Йәһәннәм утын күрмәйәсәк. Аллаһ юлын һаҡлап ғазауатта уяу торғандар; Аллаһтан ҡурҡып илаған күҙҙәр; һәм харамға ҡарауҙан тыйылған күҙҙәр”. Күҙ - Хаҡ Тәғәлә биргән иң оло ниғмәт. Был ниғмәт өсөн беҙ Уға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Рәхмәтле булыу Хаҡ Тәғәлә уларҙы нимә өсөн яралтҡан - шуның өсөн файҙаланыу, тигәнде аңлата. Күҙ беҙгә донъялағы эштәрҙе эшләй алһын өсөн, мосолман ҡәрҙәштәребеҙгә риза булып ҡарар өсөн, Ҡөрьән, хәдиҫтәр, дини китаптар уҡыр, дин әһелдәрен, яҡшы кешеләрҙе, Аллаһҡа яҡын торған әүлиәләрҙе күрер өсөн, үҙебеҙҙе ураткан мөхитте күҙәтеп, Аллаһы Тәғәләнең хикмәтен һәм бөйөклөгөн аңлар өсөн һәм ошо ниғмәттәре өсөн Хаҡ Тәғәләгә шөкөр итер өсөн бирелгән. Әгәр ҙә беҙ сит ҡатындарға ҡараһаҡ, мосолмандарҙың етешһеҙлектәрен генә күрһәк, тимәк, беҙ Уға ниғмәте өсөн шөкөр итә белмәгәндәрҙән буласаҡбыҙ. Ҡөрьәндә әйтелгән (яҡынса мәғәнәһе): “Әгәр ҙә һеҙ шөкөр итеүселәрҙән булһағыҙ, Мин, һис шикһеҙ, ниғмәттәремде арттырасаҡмын, әгәр ҙә залимдарҙан булһағыҙ, Минең язам бик ҡаты” (“Ибраһим”, 7-се аят).

Имам ал-Ғазали яҙа: “Һиңә ике сәбәпкә бәйле, күҙенде харамдан йәшерергә кәрәк. Тәүгеһе: күҙҙәрең күргән бөтә нәмә лә һинеке булмаясаҡ. Күреп тә уның һинеке булмаясағын белеп, үкенеүгә ҡарағанда, күҙҙе харамдан тыйыу күпкә еңелерәк. Фани донъяның харамына ҡарау һиңә зыян ғына итәсәк. Икенсе сәбәп: Аллаһы Тәғәлә Һиңә күҙҙәрҙе был донъяла тәғәйенләнеше буйынса файҙаланырға бирҙе, ә ахирәттә - Аллаһы Тәғәләгә ҡарар өсөн. Әгәр ҙә фани донъяла харамға ҡарауҙан тыйылмаһаң, ошо оло ниғмәттән (Аллаһы Тәғәләне күреүҙән) мәрхүм ҡалыуың бар”.

Харамға, белмәйенсә, аңғармаҫтан күҙ һалып алыу гонаһ түгел, ләкин ентекләп бағыу, оҙаҡ текәлеү, йәки ҡабаттан ҡарау гонаһҡа инә. Аллаһтың Рәсүле (с.ғ.с.) әйткән: “Эй, Ғәли, йәннәттә һинең өсөн айырым хазина урыны бар. Харамға бер мәртәбә ҡарағандан һуң, икенсе тапҡыр күҙ һалма. Бер ҡараш ташлау - үҙең өсөн (гонаһ һаналмай), ә икенсе ҡабатлап ҡарау - үҙеңә зыян яһау (гонаһҡа инә)” (Әхмәд). Харамға күҙ һалыу, иғтибар йүнәлтеү - динебеҙ өсөн ағыу. Ә күҙҙе харамдан һаҡлау иманды нығыта һәм Аллаһҡа ғибәҙәт итеү шатлығын кисерергә ярҙам итә. Аллаһтың Рәсүле (с.ғ.с.) “Аллаһы Тәғәлә әйтә: “Харамға ҡарау - шайтандың ағыулы уҡтарының береһе. Кем дә кем Минән ҡурҡып, ҡарашын харамдан һаҡлай, мин уны (ҡарашты) иманға әйләндерермен, һәм ул кеше мотлаҡ имандың ләззәтен йөрәгендә тоясаҡ”, тигән (Табрани, Хаким).

Имам Әхмәд һәм Табарани һөйләгән икенсе хәҙистә шулай тиелә: “Ҡатын кешенең зиннәтенә (аңғармаҫтан) күҙ һалып, шундуҡ (Аллаһтың ризалығы өсөн) ҡарашын йәшергән һәр мосолманға Аллаһы Тәғәлә был ғәмәле өсөн йөрәген ҡыуандырыр ғибәҙәт менән бүләкләйәсәк”.

Асфахани тапшырған хәдисҭә йәнә лә шулай тиелә: “Хөкөм көнөндә Аллаһ юлын һаҡлап уяу торғандарҙан һәм, Аллаһтан ҡурҡып, себен башы тиклем генә күҙ йәше ҡойғандарҙан тыш, иламаған бер генә күҙ ҙә ҡалмаясаҡ”. Дин әһелдәренең күпселеге фекеренсә, шәриғәт ҡушмаһа, хатта ҡарт һәм йәмһеҙ сит ҡатынға ла ҡарау яҙыҡ һанала.

Мосолман иргә хатта икенсе ирҙең кендектән алып тубығына тиклемге өлөшөнә ҡарау тыйыла. Ҡатындарға ла ошондай уҡ талап ҡуйыла. Әгәр ҙә шәриғәт ошондай тыйыу һала икән, нисек итеп берәй ир кешегә ят ҡатындың тәненә, ә берәй ҡатынға ят ирҙәрҙең тәненә ҡарарға мөмкин булһын ти инде?! Дөйөм мунсаға, пляжға йөрөгәндәр был турала ла уйланһындар ине.

Аллаһы Тәғәлә кешегә зыян килтермәгән бөтә нәмәгә лә рөхсәт бирә. Харам бер ҡарағанда ҡәнәғәтлек, ләззәт биргән кеүек. Эйе, ул - хас та балға ҡушып болғатылған ағыу. Ауыр һымаҡ күренгән нәмәләр менән һынамаһа, беҙҙе Аллаһы Тәғәлә нимә менән һынар ине һуң? Әгәр ҙә харамдан тыйылмаһаҡ, нисек итеп беҙ үҙебеҙҙе Аллаһтың хаҡ ҡолдары тип раҫлай алабыҙ? Аллаһы Тәғәлә беҙҙе бар итеүсе, беҙ Уның мәхлүктәре. Беҙ “ни өсөн, нимәгә ул?” тигәнерәк һорауҙар ҡуймайынса, бер һүҙһеҙ, Уға буйһонорға тейешбеҙ. Гонаһ ҡылабыҙ икән, быны танып, тәүбәгә килеп, Хаҡ Тәғәләнән ярлыҡау һорарға тейешбеҙ.

Был үтенесте мөъминә ҡыҙ туғандарға еткермәксемен. Аллаһы Тәғәлә иман биреп, һеҙҙе ҙурланы һәм һеҙ йәннәткә инергә өмөт итәһегеҙ. Шуға ла үҙегеҙҙе Көнбайыштағы ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар кеүек тотмағыҙ, сөнки улар үҙҙәрененең киләсәген ҡартайыу һәм был донъялағы үлем, тип кенә ҡарайҙар, киләсәктә бүтән бер нәмәгә лә өмөт итмәйҙәр.

Аҡылы һәм иманы булған лайыҡлы ирҙәр һеҙгә былай ҙа хөрмәт менән ҡарайҙар. Ҡыйбатлы әйберҙе беҙ сейфта, йәки һандыҡта бикләп тотабыҙ. Һеҙ ҙә үҙ зиннәттәрегеҙҙе хәләл дәрегеҙ өсөн генә һаҡлағыҙ. Матурлығығыҙҙы арзанайтылған тауар һымаҡ күргәҙмәгә сығармағыҙ. Рәсүл (с.ғ.с.) Ахырзаманда ҡатындар араһында шундай айырым бер төркөм пәйҙә буласағын әйтә. Улар хисабына инеүҙән һаҡланығыҙ. Имам Мөслим тапшырыуында хәҙис шулайыраҡ яңғырай: “Өммәтемдән мин үҙем күреп өлгөрмәгән ике төркөм кешеләр Йәһәннәм әһелдәре буласаҡ... һәм ҡатындар: улар бер үк ваҡытта кейемкейгән һәм бер үк ваҡытта яланғастар ҙа, улар һылана-һыйпана, ирҙәргә тартыла һәм уларҙы аҙҙыралар. Улар Йәннәткә инмәйәсәк һәм сикһеҙ арауыкты биләгән Йәннәттең хатта еҫен дә тоймаясаҡтар”.

Хөрмәтле мосолман ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ! Ахирәттә ниғмәте йәки язаһы булмаған бер генә урын да юҡ, йәғни һеҙ аңлаған нейтраль зона унда юҡ. Йәннәткә инмәгәндәр, мотлаҡ Йәһәннәмгә быраҡтырыласаҡ. “Йәһәннәмдә иң бәләкәс һәм иң еңел ғазап - кешенең аяҡ аҫтындағы янып ятҡан ҡуҙҙар, ләкин уларҙан хатта мейе лә ҡайнап торасаҡ, оло усаҡ ҡаҙандағы һыуҙы ҡайнатҡан һымаҡ” (Аль-Бухари, Мөслим).

Хөрмәтле мосолман ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ! Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе Исламды таратыу өсөн һәм Исламға ярашлы, татыу, өлгөлө ғаилә булдырһын һәм тәрбиәле балалар үҫтерһен өсөн яралтҡан, ә аҙғынлыҡ өсөн түгел. Шуға ла: “шайтан һәм уның фекерҙәштәре - динһеҙҙәр беҙҙе Ислам динен эстән тарҡатыр өсөн файҙаланмаймы?” - тигән һорауҙы ла үҙегеҙгә бирергә онотмағыҙ. Аллаһы Тәғәлә ҡушҡан юлдан барыу - ике донъя бәхете өсөн дә сәбәпсе бит. Һәр ҡушылғанды үтәй алмағанда ла, хәлегеҙҙән килгәнен эшләргә тырышығыҙ. Улай ҙа килеп сыҡмаһа, ниәт булһа ла әйтегеҙ. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте киң, өмөттө юғалтмағыҙ. Ҡылған гонаһтары өсөн үкенгәндәр - уларҙы ҡылмағандарға бәрәбәр. Аллаһы Тәғәлә тәүбәгә килгәндәрҙе ярата. Ысын күңелдән тәүбә иткәндәрҙең гонаһын Аллаһы Тәғәлә яҡшылыҡ менән алмаштыра.

Сабырлыҡ арҡаһында һеҙ Йәннәт солтаншалары, батшабикәләре буласаҡһығыҙ. Ислам китаптарында шулай тип яҙылған: “Хәленән килгәнсә дин талаптарын үтәгән, үҙҙәренең сафлығын, намыҫын һаҡлаған, ят ҡараштарҙан тәнен һаҡлаған мосолман ҡыҙҙары, Йәннәттәге хур ҡыҙҙарынан етмеш тапҡыр яҡшыраҡ”. Бына шуға ла ике донъяға рәхмәт итеп ебәрелгән Аллаһы Тәғәләнең һөйөклө Рәсүле Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) әйткәндәре һеҙҙе уйландырһын: “Йәннәт әһелдәренән булған хур ҡыҙы был донъяла күренгән булһа, ул үҙенең хуш еҫе һәм балҡышы менән көнбайыш һәм көнсығышты бөтөн арауыкты яҡтыртыр ине. Аллаһ менән ант итәм, хур ҡыҙының баш кейеме тотош оло фани донъянан һәм уның эсендәге барлыҡ нәмәнән дә яҡшыраҡ” (Аль-Бухари, Мөслим, Табарани). Тимәк, иманлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уларҙан өҫтөн буласаҡ.

Әлеге мәлдә күп мосолман ирҙәре йәй етеү менәү ҡатындарына ғәүрәт урындарын күрһәтеп йөрөргә рөхсәт итә. Мосолман ирҙәре был турала ҡатындары, һеңлеләре, ҡыҙҙары менән һөйләшергә тейеш. Хәҙерге заман ирҙәрендә үҙҙәренең ҡатындарына тейешле дәрәжәләге элек маҡталған көнләшеү тойғоһо кәмене. Мин ыҙғышырға, ғауғалашырға була, тип әйтмәйем. Ләкин өгөтләү, аҡыллы, яҡшы һүҙ менән аңғартыу, кәрәк икән, ҡатыраҡ итеп тә әйтеү, Дәлилләп аңлатыу артыҡ булмаҫ ине. Хатта ире тыймаған хәлдә лә иманға, Исламға, Хаҡ Тәғәләгә, пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдкә (с.ғ.с.) булған һөйөү ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға үҙҙәренең ғәүрәт урындарын ҡапларға мәжбүр итһен.